**Рус мәктәптәрендә башланғыс кластарҙа башҡорт телен уҡытыуҙа ҡулланылҡан отошло алымдар.**

**Яппарова Р. А. Стәрлетамаҡ районы**

Тел – һәр милләттең оло хазинаһы. Телен һаҡлаған илен һаҡлар, ти халыҡ. Илен, милләтен һаҡлар өсөн халыҡ иң элек телен һаҡларға тейеш.

Башҡорт теле – башҡорт донъяһына алып инеүсе асҡыс.

Башҡортса бер аҙ аңлаған һәм бөтөнләй белмәгән башҡорт балаларына, шулай уҡ башҡа милләт балаларына башҡорт теле сит тел булараҡ уҡытыла. Шуға ла уҡытыусыларға бөтә нәмәне яңынан башларға: балаларға өндәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәтергә, һәр һүҙҙең мәғәнәһен аңлатырға, һөйләмдәр төҙөтөргә һәм уҡыусыларҙың телмәрен үҫтерергә тура килә. Уҡытыусы, балаларҙың башҡорт телен белеү кимәлен иҫәпкә алып, йәш үҙенсәлектәрен өйрәнеп был мәсьәләләрҙе сисеү юлдарын һәм телде үҙләштереүгә йүнәлтелгән эффектлы алымдарҙы эҙләй. Бер телде лә кәмһетмәй, башҡорт телен өйрәтеүҙе көсләп түгел, ә ҡыҙыҡһынып өйрәнеүгә ирешеү уҡытыусыларҙың төп бурысы.

Нисек предметҡа ҡарата уҡыусыларҙа ҡыҙыҡһыныу уятырға һуң? Башҡорт телен аңламаған балаларҙы нисек башҡортса һөйләшергә өйрәтергә; нисек уларға аңлы уҡыу, яҙыу күнекмәләрен бирергә; ниндәй юлдар менән балаларҙа башҡорт теленә һөйөү тәрбиәләргә? Әлбиттә, был уҡытыусының тырышлығына, оҫталығына, белеменә бәйләнгән. Урыҫ мәктәптәрендә башҡорт телен өйрәнеү буйынса һәр төрлө эш уҡыусыларҙа тел өйрәнеүгә ҙур теләк тыуҙырырлыҡ, башҡорт телен яратырлыҡ, был теледе белеү менән ғорурланыу тойғоһо уятырлыҡ булып башҡарылырға тейеш.

Башҡорт теле дәрестәрендә төрлө алымдарҙы ҡулланыу ыңғай һөҙөмтәләр бирә. Һәр дәрескә уҡыусы теләк менән килһен өсөн, унда ғәжәпләнеү, һоҡланыу, ҡәнәғәтләнеү тойғолары уятырлыҡ эш алымдары һайларға кәрәк.

Уҡыу материалын үҙләштереүгә уҡыусыларҙың үҙҙәрен актив ҡатнаштырырға кәрәк. Был йәһәттән хор менән уҡыу, ятлау, рәсемдәр һәм картиналар буйынса әңгәмәләр, йырҙар өйрәнеү,мауыктырғыс күнегеүҙәр ҡулланыу, уйын алымдары һәм башҡа бик күп эш төрҙәре дәресте ҡыҙыҡлы, файҙалы, ижади итеп үткәрергә ҙур мөмкинселек бирә. Башҡорт өндәрен дөрөҫ әйтеү, телмәргә иғтибар итеү, яңы һүҙҙәр туплау – беҙҙең көндәлек эшебеҙ.

Һәр дәресте уңышлы үткәреү өсөн уның маҡсатын ярашлы билдәләргә тырышам. Унан ошо маҡсатҡа өлгәшеү юлдарын һәм алымдарын һайлайым.

Беренсе сиратҡа уҡыусыларҙың иғтибарын йәлеп итеүҙе ҡуям.

Башҡорт телендәге үҙенсәлекле өндәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәнеү һәр дәрестә ныҡлы урын алырға тейеш. Өндәрҙе дөрөҫ әйтеү беренсе синыфта

ныҡлы үҙләштерелһә, артабанғы кластарҙа уҡырға, яҙырға өйрәнеүгә етерлек нигеҙ була. Был өндәр менән эшләгәндә, уҡыусыларҙың ауырлыҡ кисереүҙәрен иҫәпкә алып, һәр дәрестә фонетик күнегеүҙәр башҡарыу маҡсатҡа ярашлы. Рифмалы юлдарҙы балалар тиҙерәк хәтерҙә ҡалдыра. Үтелгән темаға бәйле бәләкәй текстарҙы ятлатыу телмәрҙе әҙер лексик берәмектәр менән байыта.

Күп кенә балалар шиғырҙы тиҙ генә ятлай алмай. Шуның өсөн ҡыҙыҡһындырыу маҡсатында шиғыр ятлауҙы уйын рәүешендә үтеәрергә була. «Һөйләргә һәм хәрәкәт итергә» тигән принцип менән эшләү ыңғай һөҙөмтәләргә килтерә. Телмәр менән хәрәкәт бергә килгәндә балаға шиғырҙы тиҙ иҫтә ҡалдырырға булышлыҡ итә. Шулай уҡ шиғырҙағы һүҙҙәрҙе һүрәттәр менән алмаштырып йәки һүҙҙәрҙең беренсе хәрефтәре ярҙамында ятлатыу һүҙ байлығын арттырыуҙа, хәтерен, иғтибарын нығытыуҙа, башҡорт теленә ҡыҙыҡһыныу уятыуҙа ҙур урын алып тора.

Башланғыс класс уҡыусыларының уҡыу тиҙлеген үҫтереүгә лә ныҡлы иғтибар бүлергә кәрәк. Бала уҡырға өйрәнгәндә, иң элек, хәрефтәрҙең исемдәрен әйтеп укыусан була. Ошо өндәрҙе бергә ҡушып, һүҙҙе ижекләп уҡыуға күсеү ҡыйын этаптарҙан һанала. Был ҡыйынлыҡты бер аҙ еңеләйтеү өсөн Н. А. Зайцевтың таблицалар һәм кубиктар менән эшләү технологияһы файҙалы.

Уҡыу процесында мауыҡтырғыс күнегеүҙәр ҡулланыу ҙур әһәмиәткә эйә. Улар материалды ҡыҙыҡлы, аныҡ, йәнле һәм аңлайышлы итеп биреү менән бергә, уҡыусыларҙа актив фекерләү тәрбиәләй.

Һәр башҡорт теле дәресе күргәҙмәлек менән ныҡ ота. Бәләкәй класс уҡыусыларының психологик үҙенсәлектәренән бала нимәне күрә – шуларҙың бөтәһен дә тиерлек хәтерендә оҙаҡ һаҡлай ала. Шуның өсөн башланғыс кластарҙа күргәҙмә материалдар ҡулланыу мөһим. Дәрестәрҙә картиналар, сюжетлы һүрәттәр, уйынсыҡтар, дидактик карточкалар, техник саралар ҡулланыу балаларҙа белем алыуға ыңғай ҡараш тәрбиәләй. Дәрестәрҙә күргәҙмә материалдар эффектлы файҙаланыу уҡыусыларға өйрәнелә торған материалды яҡшыраҡ иҫтә ҡалдырырға булышлыҡ итә.

Ижади эшләгән, үҙ дәрестәрен ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс итеп үткәрә белгән уҡытыусылар ғына рус мәктәбе шарттарында башҡорт теленә өйрәтеүҙе уңышлы башҡара ала. Минеңсә, барыһы ла уҡытыусының үҙенән тора.

Эшләргә теләмәһәң, сәбәп эҙләйһең, эшләргә теләһәң юлдарын, ысулдарын табаһың, ти халыҡ. Уҡытыусыларҙың да күпселеге үҙ эшенә ижади ҡарай, теге был юҡ тип тормай, төрлө алымдар уйлап таба.